# Балалар баҡсаһының кескәйҙәр төркөмөндә уйын үҫеш мөхитен ойоштороу үҙенсәлектәре

Хәҙерге заман балалар баҡсаһы – ул баланың үҙенең тиҫтәрҙәре һәм өлкәндәр менән киң эмоциональ-практик аралашыу тәжрибәһе алыу урыны булып тора. Бындай тәжрибәне байытыу, ойоштороу мөмкинселектәрен киңәйтеү өсөн төркөмдә махсус аралыҡ булдырыу мөһим. Был аралаҡта бөтә төркөм балалары менән бер юлы актив рәүештә танып белеү һәм ижади эшмәкәрлек менән шөғөлләнергә мөмкин. Ул, йәғни ошо үҫеш аралығы, мәктәпкәсә йәштәге балала үҙ-үҙендә ышаныс тойғоһо тәрбиәләй, үҫтерә, баланың бөтә булған һәләттәрен үҫтереүгә булышлыҡ итә, үҙаллыҡ, ижадылыҡ, инициатива тәрбиәләй.

Һәр төркөмдөң үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу ҙа мөһим: аң-үҫеш кимәле, һәләттәре, ҡыҙыҡһыныуҙары, һәүәҫлектәре, төркөмдөң енси составы, балаларҙың шәхси характеристикалары.

*Хәҙер һүҙ кескәйҙәр төркөмө балалары тураһында (2 йәштәге 4 йәшкә тиклем).*

2 йәштән 4 йәшкә тиклемге ваҡыт-балаларҙың физик үҫешенең нығыныу, психик үҫешенең шәбәйеү һәм баланың шәхесенең төп һыҙаттары формалаша башлау осоро ул. Кескәйҙәр төркөмө иң башта хәүефһеҙ һәм уңайлы итеп йыһаҙландырылырға тейеш. Был төркөмдә йыһаҙдарҙың урынын алмаштырмаҫҡа тырышыу дөрөҫөрәк, сөнки был әллә иң ҙур тәьҫир яһамаясаҡ балаларға (бигерәк тә 3 йәшлектәр). балалар әлеге үҙенең тиҫтерҙәре менән яҡшылап аралаша белмәйҙәр һәм “бергә” уйнамайҙар, әлегә “эргәлә” генә. 3 йәшлек баланың дәрестә лә, уйнағанда ла төп партнеры булып өлкән кеше тора, шуға күрә 2-3 баланың һәм тәрбиәсенең бергә эшмәкәрлектәре өсөн махсус урын билдәләү кәрәк.

Был йәштә балалар бик хәрәкәтсән, улар актив рәүештә үрмәләргә, йүгерергә, атларға өйрәнәләр. Ләкин координациялары әлеге насар: етеҙлек, йорлоҡ, сослоҡ етешмәй, шуға төркөм иркен булырға тейеш.

*Төркөмдә балаларҙың предметтың аҫтынан, араһынан, ашаҡлап үтергә өйрәнеүҙәре өсөн әйберҙәр булһа бигерәк тә яҡшы.* Бының өсөн ҙур пластик кубтар (тишектәре булһын), трапеция формаһында өҫтәлдәр (ҡырҙарында түңәрәк тишектәр менән) ярай.

Әгәр ҙә төркөм иркен, ә балаларҙың һаны 10-дан артмай икән, әүһәләк тә элергә мөмкин. Әлбиттә, хәүефһеҙлек тураһында онотороға ярамай. Кескәйҙәр өсөн тағы 2-3 ҙур һәм бер нисә бәләкәйерәк туптар булырға тейеш – был уйынсыҡтар балалрҙың атлауын яҡшырта. Әгәр ҙә инде төркөмдә 1-2 ҡурсаҡтар өсөн коляска, 1-2 ҙур автомобиль (бала үҙе ултыра торған), 3 тәгәрмәсле велосипед булһа бигерәк яҡшы.

Бәләкәстәр үҙҙәрен уратып алған предметтар, йыһаҙдар менән бик тә ҡыҙыҡһыналар, өйрәнәләр. Һәм төркөмдәге бөтә уйынсыҡтар ҙа, предметтар

ҙа донъяның төрлөлөгөн, байлығын күрһәтеп торорға тейеш. Иҫтә торорға кәрәк, бөтә яңы күргән әйберҙе бала өлгө итеп ҡабул итә, башҡалары менән сағыштыра. Шуға күрә, предметтар һәм уйынсыҡтар иң тәүҙә ысынбарлыҡтағыһына оҡшарға тейеш. Мәҫәлән, хайуандар төҫөндә, төҙөлөшөндә, пропорцияһында булһын.

*2-4 йәштә баланың сенсорик һәләттәренә база һалына.* Шуға ла төркөмдөң төҙөлөшө, ойошторолошо баланаың тирә-йүнде өйрәнеүенә булышлыҡ итергә тейеш. Предметтар асыҡ төҫтә, ябай формала, төрлө ҙурлыҡта булҙын. Уларҙың еҫен, тауышын, төҫөн йә үтә күренмәлеген, шыма йә ҡытыршылығын, ҡаты йә йомшалыҡтың өйрәнеп булһа, үтә лә һәйбәт.

Ҡул моторикаһын үҫтереү өсөн махсус дидактик уйынсыҡтар булыуы кәрәкле. Мәҫәлән, төрлө пирамидалар. Шнурҙар һ.б. кескәй бала өсөн төрлө йәбер-уйынсыҡ, ә уның материалының хаҡы файҙаһын билдәләмәй. Иң тәүҙә уйынсыҡ файҙалы булырға тейеш.

*Уйын кескәйҙәр өсөн иң яраткан, тәбиғи эшмәкәрлек, һәм был осорҙа ул саҡ үҫеш ала ғына.* Ә уйынсыҡтары дөйөмләштерелгән характерҙа һәм функциональ булырға тейеш. Мәҫәлән, автомобилдә иң мөһиме – кузовы, тәгәрмәстәре, кабинаһы, ә ҡалғанына (төҫө, тәғәйенләнеше) артыҡ иғтибар биреү кәрәкмәй. Дүр йәшлектәр төркөмөндә реаль тормошто сағылдырған йынсыҡтар ҡулланырға мөмкин(еңел машиналар, йөк һәм тиҙ ярҙам машиналары).

*Кескәй балалар ҙур уйынсыҡтарҙы һәм ҡорамалдарҙы яраталар.* Улар өсөн актив хәрәкәткә этәргес булып тышҡы стимул тора, шуға күрә материалдарҙы (тышы сағыу, ылыҡтырғыс булырға тейеш) асыҡ йәштәләрҙә урынлаштырыу кәрәк. Материалдарҙы йышыраҡ (аҙнаһына 1 тапҡыр) алмаштырыу кәрәк, ә артыҡ күп ҡуйыу файҙаһыҙ – балаларға һайлап алыуы, аҙаҡ йыйыштырыуы ҡыйынға тура киләсәк. Төрлө конструктив һәм төҙөлөш йыйылмалар, ҙур һәм төҫлө ҡумталар балалар өсөн ылыҡтырғыс әйберҙәр, улар ярҙамында кескәйҙәр үҙҙәренсә тирә-йүнде үҙгәртә, төҙөй алалар. Улар ҡыҙҙар өсөн дә, малайҙар өсөн дә ярашлы.

*Кескәйҙәр төркөмөндә ҡом, ҡыу, балсыҡ, бояуҙар менә уйнау өсөн махсус урын булдырыу кәрәкле.*

Уның өсөн махсус ҡоролмалар талап ителә. Был “бысраҡ” уйындар өсөн материалдарҙы һыу сығанаҡтарына яҡшыраҡ урынлаштырырға кәрәк. Әгәр ҙә мөмкинселектәр юҡ икән махсус ҡоралмалар алырға, былай эшләргә була: балалар өҫтәленең бер яғынан ҡом, һыу, балсыҡ, йә булмаһа бояуҙар һалынған таҙ ҡуйыу өсөн тишек яһап, икенсе яҡтан йоҡа таҡта ҡатырға. Был ваҡытта эргәһендә, ҡумта эсенә, йә кәштәләрҙә башҡа кәрәкле предметтар ҡуйырға була: резина уйынсыҡтар, ҡойоп уйнау өсөн һауыт-һаба, йөҙә торған уйынсыҡтар, шариктар, губка, биҙрәләр, формалар.

*Дидактик уйындарҙан лото һәм парлы һүрәттәр яҡшыраҡ.* Ёлбиттә, мозаика ла булырға тейеш (3 йәшлектәр өсөн – пластиктан яһалған ҙур, 4 йәшлектәр өсөн магнитлы). Тағы ла 3-12 өлөштән торған кубиктар йыйылмалары (4-9 бөртөк); баланың аң-белемен үҫтереүсе уйындар. Мәҫәлән, “Биҙәктәр төҙө”, “Квадрат төҙө” һ.б.

2-4 йәштә балаларҙа рәсем төшөрөүгә ҙур ҡыҙыҡһыныу уяна. Иң яҡшыһы – төркөмдә махсус үҙе юйылыусан һүрәт төшөрөү өсөн таҡталар, йә ябай обой рулоны, балауыҙҙан яһалған аҡбуҙар. Был материалдар үҙенең ҡулланышы менән уңайлы: баланың ҡулы бысранмай, йыш алмаштырып тороу кәрәкмәй, ваҡланмай; шул уҡ ваҡытта улар һынлы сәнғәттә баланың тәүге оҫталығын үҫтерә.

Кескәйҙәрҙең һәр береһе сағыу һүрәтле китаптарға ҡыҙыҡһыныу кисерә. Был йәштә уларҙың бармаҡ моторикаһы аҙаҡҡаса үҫешеп етмәй, хәрәкттәре импульсив һәм насар координациялы, шуға күрә ҡаты тышлы китаптар булырға тейеш.

*Төркөмдә балаларҙың театралыштырылған уйындары өсөн ваҡ уйынсыҡтар, хайуан, кеше фигуралары, әкиәт геройҙары булыуы; күңел асыу уйындары өсөн – күләгә театры, бармаҡса ҡурсаҡтар булыуы мәжбүри.*

Бәләкәй бала тирә-йүндәге донъяны ғына түгел, кешеләрҙең, шул иҫәптә үҙенең дә асылын танып белергә өйрәнә. Төркәмдә төрлө йәштәге кешеләрҙең фотоһы, һүрәттәре элеп ҡуйылған махсус урын булһын; кешенең төрлө күңел торошо (йылмайыуы, илау, ҡыуаныу, асыулы, һағышлы, күңелһеҙ һ.б.); төрлө һиәфәттәл (прическа. Кейем, аяҡ кейеме); төркөм балаларының, уларҙың ғаилә фотоларын элеп ҡуйырға була.

Шулай уҡ төркөм эсендә 4-5 урында көҙгөләр элеү ҙә файҙалы. Был бала үҙен башҡалар араһында күрһен, үҙенең хәрәкәттәрен, мимикаһын ҡараһын өсөн эшләнә (әйткәндәй, бала үҙен көҙгөлә күрһә, илауын онота). Ә төҙәнеү мөйөшө уны үҙен үҙгәртергә, ошо үҙгәрештәрҙе күҙәтергә мөмкинселек бирә.

Ошо кәңәштәрҙе ҡулланғанда тәрбиәселәр өсөн уңайлы, балалар өсөн ҡыҙыҡлы шартар тыуыр.

# Иртә йәштәге балалар төркөмөндә үҫеш мөхитенең үҙенсәлектәре

Бала ике йәшлек ғүмерендә әйберҙәрҙе хәрәкәтләндереп уның физик һәм динамик сифатын (үлсәмен,формаһын, төҫөн) арауыҡтағы бiләнешен (яҡын, алыҫ) бер бөтөндө өлөштәргә бүлеп, һәм кере бөтөн йыйыу (мәтрүшкәне, пирамиданы сисеп кире йыйыу) һымаҡ төшөнсәләрҙе ала башлай.

Артабан бала үҙенең хәрәкәтен, шөғөлөн өлкәндәрҙекенән айырып юғыштыра башлай. Әкренләп баланы уйынға, әйберҙәр эшмәкәрлеге әҙерләй, үҫтерә башлай. *Бала бөтә нәмәне үҙе эшләргә теләй, үҙенең үҙ аллылығын файҙаланып бала уйындарында алыштырыусы-әйберҙәр (кубиктар, таяҡсалар) һәм башҡа уйынсыҡтар менән уйындарын уйлап сығарып йәнләндереп ебәрә. Шулай итеп бала төрлөләндереп уйнай.*

Дәрестәр өсөн иң мөһиме әйберҙәр үҫеше средаһын булдырыу, әҙерләү. *Балалар уйынсыҡ өсөн йыһаҙдар, уйын модульдәре, тәжрибә өсөн әйберҙәр, дидактик уйындар, һәр төрлө хәүефһеҙлек әйберҙәр*. Балаларҙың иғтибарына йәлеп итеп әйберҙәрҙе күрһәтеп нисек ҡулланырға, уйнатырға өйрәтергә кәрәк. Айрым өйрәтеү дәрестәрендә, уйындарҙа бала эш ҡоралдары менән нисек ҡулланырға икәнен үҙләштерә.

Мәҫәлән, арҡан менән машинаны нисек тартырға, һөҙгөс менән һыуҙан тупты нисек алып сығырға икәнлеген быңдай уйындар мөһим аңлатма бирә. *Балалар бер уйындан икенсе ваҡиғалы , әйберле уйынға күсһен өсөн төрлө төҙөлөш уйынсыҡтар ябай конструкторҙар, мозаикалар булһа яҡшы була. Өлкәндәр менә берлектә уйналған сюжетлы – дидакик уйындар, сәхнәләштерелгән уйынадр*. Әкиәттәр тыңлау бик әһәмиәтле һәм файҙалы. Тәрбиәсе балаларға һүрәттәр. слайдтар, мультфильмдар күрһәтә. Уйындарҙың йөкмәткеһен байытҡан тематик саф һауаға алып сыға. Кесе йәштәге балаларҙа әйберҙәр эшмәкәрлеге аша уйындар ғына үҙләштерелмәй.Мәҫәлән, сюжетлы-конструкторлау, зауыҡлы ижад һәләтен үҫтереү, үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү һымаҡ эшмәкәрлектәр ҙә үҫешә, байый бара.

# Өлкәндәр төркөмөндә үҫеш мөхитен булдырыу.

Балалар өлкән төркөмгә күскәндә уларҙың психологияһы үҙгәрә: ул үҙен балалар баҡсаһындағы балаларҙан ҙурыраҡ тоя башлай. Балаларҙың был тойғоһон һаҡлау өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырыу бик мөһим. Был шарттарҙа улар үҙҙәренең әүҙемлеген, үҙ аллыллығын, яуыплылығын, инициативаһын үҫтерәләр.

Өлкәндәр төркөмөндә үҫеш мөхите балаларға уйнарға, яратҡан эштәре менән булышырлыҡ итеп ойошторола. *Художестволы-эстетик эшмәкәрлек, конструирование үҙәге – былар үҫеш мөхитенең төп исемлектәре.* Өлкән балаларҙың төп үҙенсәлеге булып, төрлө килеп сыҡҡан проблемаларға ҡыҙыҡһыныу тойғоһо була. Үҫеш мөхитен ойошторғанда был үҙенсәлекте иғтибарына алыу мотлаҡ.

5-7 йәшлек балалар бик тиҙ буйға үҫәләр, бер йылда 7-12 см. Уҫеүҙәре мөһим. Шуның өсөн әйберҙәрҙе баланың буйына ҡарап һайлау кәрәк һәм йыл буйына 2-3 тапҡыр үҙгәртеү мотлаҡ.

*Уйын – балаларҙың иң яратҡан шөғөлө булып ҡала.* Был сәбәптән үҫеш мөхите балаларҙың төрлө уйындарҙа ҡатнашырлыҡ итеп төҙөлә.

*Сюжетлы-ролле уйындарҙа* балалар үҙҙәренең кешегә, әйберҙәргә ҡарата ҡараштарын сағылдыралар. Шуның өсөн уйынға төрлө яҡлы, ҡыҙыҡлы әйберҙәр индереүҙе уйларға кәрәк. Сюжетлы-ролле уйындарҙа балалар төрлө тормоштан алынған сюжеттарҙы сағылдыралар: көнкүреш (магазин, ғаилә), хеҙмәт (төҙөүселәр, врач, мәктәп), йәмғиәт уйындары (байрамдар). Был уйындар өсөн атрибуттарҙың күп булыуы яҡшы.

Мәҫәлән, “Ғаилә” уйыны өсөн, аш бешереү, өҫтәлде биҙәү өсөн атрибуттарҙың күп булыуы фәһемле. Бик күп атрибуттарҙың уйындың исеме һәм һүрәте төшкән коробкаларҙа һаҡланырға тейеш. Кәрәк ваҡытта ғына балалар уйындарҙы коробкаларҙан сығарып уйнай алалар.

*Төркөмгә ташландыҡ материалдар өсөн коробка ултыртыу яҡшы.* Бынан тыш альбомдар, төрлө уйынсыҡтар эшләргә өйрәткән китаптар, булыу кәрәк. Уйындар өсөн атрибуттар эшләүҙә балаларҙы йәлеп итеү кәрәк.

Шулай уҡ һынлы сәнғәт балаларҙың иң яратҡан шөғөлө. Ябай материалдарҙан тыш (ҡағыҙ, ҡатырға, , елем, фломастер) төрлө схемалар индереү кәрәк. Төркөмдөң бер мөйөшөндә балаларҙың эшләнгән эштәрен урынлаштырып була. Был эштәрҙе стенаға ғын а түгел. епкә лә элеп ҡуйып була. Балаларға төрлө тәжрибәләр үткәреү өсөн бик күп материалдар кәрәк. Бының өсөн айырым бүлмә асыу файҙалыраҡ.

*Өлкән төркөм балаларының үҫешендә конструктив эшмәкәрлек мөһим роль уйнай.* Үҫеш мөхитенә төрлө конструкторҙар йыйылмалары тыш схемалар, фотоальбомдар, балаларға үҙҙәренә схемалар эшләү өсөн дәфтәрҙәр индерегеҙ.

Белем биреү сығанғы булараҡ, китаптарға ҡарата иғтибар арта. Әҙәби китаптарҙан тыш китап мөйөшөндә белешмәләр алыу өсөн, аҡыл-зиһен

һәләтлелеген үҫтереүгә китаптар, энциклопедиялар булырға тейеш. Китаптарҙы алфавит тәртибендә йәки темалар буйынса (тәбиғәтте өйрәнеү, халыҡ әкиәттәре һәм автор әкиәттәре, ҡала, ил тураһында әҙәбиәт һ.б.) ҡуйыу яҡшыраҡ. Тәрбиәсе балаларға китаптар ярҙамында нисек ҡатмарлы һәм ауыр һорауҙарға яуап табырға була икәнлеген күрһәтә. Тәрбиәсе балаларға нисек китаптар һайларға, улар менән дөрөҫ ҡулланырға өйрәтә. Китаптарҙы йүнәтеү өсөн материалдар булдырырға кәрәк. Китап мөйөшөн төркөмдәге иң тыныс, яҡты урынға урынлаштырыу отошло. Унда ҙур булмаған өҫтәл һәм ултырғытар йәки диван ҡуйырға кәрәк.

5-6 йәшлек балаларҙың умыртҡа һөйәктәре ныҡ үҫешмәгәнлеген иҫәпкә алып, арҡа мускулдарын нығытыуға ҙур иғтибар итергә кәрәк. Төркөмдә балалар оҙаҡ ваҡыт бер үк позала торған урындарҙа төрлө хәрәкәт ысулдары уйларға кәрәк (дартс, балдаҡ ташлау, кеглилар, серсо, баскетбол кәрзиндәре, сәп, ташлау өсөн шарҙар, үрелеү өсөн эленгән уйынсыҡтар, үрмәләү өсөн ҡапҡалар һ.б.). *Шулай ук уйындарҙы төрлөсә ойоштороу ысулдарын күҙ уңында тоторға кәрәк*: өҫтәл артында ултырып ҡына түгел, ә тороп та, ултырып та, ятып та. Әлбиттә, бының өсөн балаҫтар һәм яҫтыҡтар, горизонталь һәм вертикаль өҫтөнлөктәр өсөн уйын материалдары кәрәк.

Балаларҙы үҙ-үҙәренә баһа бирергә өйрәтеү, уларҙың үҫешен күрһәтеү төп бурыс булып тора. Балаларҙың ҡаҙаныштары һәм уңыштары тураһында йышыраҡ һөйләшегеҙ, улар балаларға үренеп торһон өсөн билдәләр, һүрәттәр йәки пиктограммалар ярҙамында билдәләп барығыҙ. Мәҫәлән, балаға ромашка сәскәһен йыйырға тәкдим итергә итергә була. Быны эшләү бик еңел: баланың фотоһы йәбештерелгән сәскәнең уртаһы стенаға йәки таҡтаға ике яҡлы скотч йәки йәбешкән ҡағыҙ ярҙамында беркетелә. Тәрбиәсе баланың берәй ҡаҙанышын сәскә тажына яҙа, ә бала уны сәскәнең уртаһына беркетә. Аҙна аҙағында баланың ҡаҙаныштарын сәскә таждарын уҡып иҫкә төшөрөргә була. Мәҫәлән: “Ләйсәнгә ботинка бауын бәйләргә ярҙам итте”, “Прививка эшләгәндә иламаны” һ.б. Тора бара балалар ыңғай эштәрен үҙҙәре билдәләй башлаясаҡтар (үҙ аллы йәки тәрбиәсе ярҙамында), уларҙа үҙҙәренең уңыштары менән дуҫтары һәм атаһәсәләре менән уртаҡлашыу теләге тыуасаҡ, башҡаларҙың уңышына ҡыуанасаҡтар.

Балаларҙа үҙҙәренең мөмкинселектәренә һәм көстәренә ышаныс тойғоһо үҫтерергә кәрәк, үҙ-үҙең танып белергә һәм күҙәтергә өйрәтергә кәрәк. Быының өсөн төрлө юлдар бар. Мәҫәлән, балаларҙы үҙҙәренең тышҡы ҡиәфәттәренә иғтибар иттерегеҙ – “Мин үҫәм”. Стенала һәр баланың үҫешен күрһәткән билдәләр бар: кем бейегерәк, кем тәпәшерәк; бер ай эсендә күпме үҫкән; кем шәберәк үҫә, кем яйыраҡ.

Стенала һәр баланың үҫешен күрһәткән билдәләр бар: кем бейегерәк, кем тәпәшерәк; бер ай эсендә күпме үҫкән; кем шәберәк үҫә, кем яйыраҡ.

Өлкән йәштәге балаларҙы үҙҙәренең тышҡы ҡиәфәттәрен (имиджын) үҙгәртеү ҡыҙыҡһындыра. Быының өсөн төркөмдә краскалар (грим), ептән эшләнгән париктар, өлкәндәрҙең кейеме (эшләә, галстук, оҙон юбка, күҙлектәр, стюардессаның пилоткаһы, капитандарҙың фуражкаһы һ.б.) менән байытырға була. Көҙгө тураһында онотмағыҙ!

*Өлкәндәр төркөмөндә ҡағиҙәле уйындарға ҙур урын бирелергә тейеш.* Бындай уйындар балаларҙың психик процестарын үҫтереүгә һәм тәртибенә йоғонто яһай. Ҡағиҙәле уйындар бик күп: лото, домино, маршрутлы уйындар. Уйындарҙы һайлау принцибы шунан тора: уйындар ҡыҙыҡлы булһын, ярыш элементтары булһын, өлкәндәрҙән башҡа ла уйнарға мөмкинселек булһын.

*Балаларҙың логик фекерләүҙәрен, сағыштырыу һәләттәрен үҫтереүгә йүнәлтелгән, классификациялау, сериялау буйынса, һүрәтләү буйынса таныу, схемалар, модельдәр менән эш итә белергә өйрәтеүсе дидактик уйындарҙың булыуы бик кәрәк.* Шулай уҡ һанау һәм иҫәпләү күнәкмәләрен, психик процестарҙы (хәтер, иғтибар, фекерләү) үҫтереү өсөн уйындар булырға тейеш. Ваҡ моториканы үҫтереү өсөн мозаикалар, пазлы уйындары, төҫһөҙ һүрәттәрҙе буяу, трафареттар һ.б. материалдар бик мөһим. Өлкән йәштәге балалар төрлө кросвордтар, башватҡыстар менән ҡыҙыҡһыналар.

*Шулай уҡ фонематик ишетеү һәләтен үҫтереү төп бурыҫтарҙан һанала.* Шуға күрә балаларға айырым өндәргә башланған, йәки шул өн һүҙҙең уртаһында, аҙағында ишетелгән уйынсыҡтарҙы һайларға тәҡдим итергә була. Һайлап алынған уйынсыҡтарҙы һалыу өсөн ике-өс ҙур кәрзинкә ҡуйығыҙ.

*Өлкәндәр төркөмөндә балалар үткән, хәҙерге һәм киләсәк ваҡиғалар менән ҡыҙыҡһыналар.* Төркөмдә һеҙ һөйләгән хикәйәләрҙе тиҙерәк ҡабул итерлек әйберҙәрҙе (уйынсыҡтар, һүрәттәр, илюстрациялар, энциклопедиялар) булдырығыҙ. Өлкән балаларға тыуған яҡ, тыуған илде өйрәнеү өсөн күп мөмкинселектөр асыла. Шуға күрә төркөмдә республиканың, ҡаланың гербы, флагы булырға тейеш, карта эленеп торорға тейеш. Картала үҙҙәре йәшәгән ҡаланы билдәләп ҡуйығыҙ.

*Эмоциялар тураһында (ҡурҡыу, ҡыуаныс, бойоғоу, көлөү һ.б.) төшөнсәләрҙе үҫтереүҙе дауам итергә кәрәк.* Төркөмдө төрлө эмоцияларҙы сағылдырған һүрәттәрҙе элеү өсөн урын булдырығыҙ (“плюс” – дөрөҫ, мөмкин, “минус” – былай эшләргә ярамай).